Тема: А.Йәғәфәрованың «Умырзая»хикәйәһен өйрәнеү

Маҡсат:

1) Әҫәрҙең йөкмәткеһе менән танышыу,үҙләштереү;аңлы,тасуири
2) Уҡырға өйрәтеү;бәйләнешле телмәр үҫтереү;

Тәбиғәткә,тыуған яҡҡа һөйөү; матурлыҡты күрә белеү,йөрәк аша үткәреп,саф тойғолар,күңел сафлығы тәрбиәләү.

3) Кеше һәм тәбиғәттең берҙәмлеген аңлы үҙләштереү,даими тәрбиәгә күнектереү.

Йыүазландырыу: «Гүзәллекте яҡла һәм һаҡла»плакаты,сюжетлы һүрәттәр,телевизор,сәскәләр һүрәте,маскалар,магнитофон таҫмаһы.

Дәрес барышы

I. Ойоштороу моменты

II. Дәрестең маҡсатын әйтеү

- Бөгөн дәрестә Айһылыу Йәғәфәрованың «Умырзая» хикәйәһе менән танышасаҡбыҙ һәм телмәр үҫтереү өҫтөндә эшләйәсәкбеҙ.

III.Артикуляцион күнегеү

- Тиҙәйткесте матур,шыма уҡырға өйрәнеү

ҡара ҡарға ҡарҙан бара
ҡанаттарын ҡаға-ҡаға.
Эй маҡтана,эй маҡтана:
- ҡанат остарына тағып,
Яҡшы хәбәр килдем алып,
Яҙ башлана,яҙ башлана.

- мин уҡып күрһәтәм
- хор менән уҡыу

— 6 рычаг буйынса укыу

Т — Г
В - Н
Б – М

IV. Темаға инеш әңгәмә

— Балалар, йылдың ниндәй миҙгеле башланды?

Был миҙгелдә ниндәй билдәләр белдерә?

— Эйе, карлы-буранлы кыштан һуң тыуған яктарыбыҙға тағы яҙ килә. Бөтә тәбиғәт уяна. Кәҙерле кунактарыбыҙға яҙғы байрам бүләге итеп "Яҙғы йыр" (М. Шиһапов һүҙҙәре, Р. Хәсәнов музыкаһы) йырын бүләк итәйек.

"Яҙғы йыр"

1) Йылы нурҙар ер өҫтөнә бөркөлә,
Йөрәктәрҙе елкендереп, яҙ килә.

1С: Яҙҙы котлап йырлайык, дуҫтар Беҙгә
кушылып һайрай коштар, Зәңгәр
күктә һөйөнөшөп, Яна-яна
йондоҙҙар.

2) Кояшка табан үрелә
саф гөлдәр,
Хеҙмәт йырына күмелә
күңелдәр.

3) Бәхет балкый һәр кешенең
йөҙөндә,
Беҙҙе һағынып, яҙҙар килә
үҙе лә.

— Рәхмәт, балалар! Ысынлап та, һәр беребеҙ яңырыу, шатлык тойғоһо кисерәбеҙ. Күңелдәргә дәрт өҫтәлә, йәнгә рәхәтлек килә, йөҙҙәребеҙ яктыра. Ошондай матур көй тыуҙырыусы композиторға нимә әйтәйек? (Ҙур рәхмәт).

V. 1) Бөгөн, балалар, яҙ миҙгелендә бөтә тереклектең уяныуын сағылдырған иҫ киткес матур әҫәр — "Умырзая" хикәйәһе менән танышып үтәсәкбеҙ тигән инем. Был әҫәрҙе А. Йәғәфәрова яҙған (портретын күрһәтәм).

— Бәлки балалар, берәйегеҙ умырзая тураһында беләлер, күргәне барҙыр?

— Ул сәскә исеме.

— Эйе, карҙар иреп бөтөр-бөтмәҫтән үк тәүге сәскә үҫеп сыға. (Ул сәскәне күрһәтәм, тактаға элеп куям). Тағы ниндәй беренсе сәскәләрҙе күргәнегеҙ бар?

(Һанайҙар: умырзая, елбәгәй, бәпембә, баллыкай, ынйы сәскәһе, үгәй инә).

2) Хикәйәне сәхнәләштере:

— Ә хәҙер иптәштәрегеҙ был хикәйәне сәхнәләштерер (Алдан әҙерләнгән укыусылар, маскалар кейеп, уйнайҙар).

("Умырзая" Ә. Фәйзи һүҙҙәре, халык көйө) йыры башкарыла (магнитофондан).

Умырзая
Боҙ катлауы ирегәс, ер өҫтөнә
Умырзая сыға, карағыҙ:
Умырзая сыға,
Умырзая калка,
Умырзая һуҙа һабағын. Боҙ
катлауы кеүек көнкүрештән Сығаһым да
килә тиҙерәк,
Умырзая кеүек,
Умырзая кеүек,
Умырзая кеүек тиҙ үрләп...
Умырзая бик тиҙ үҫеп сыға, Бик аҙ ғына
йәшәй, турайып,
Умырзая бик тиҙ,
Башын аҫка эйә,
Умырзая һулый моңайып...

(Короған япрактар аҫтынан иплəп кенә берәү башын калкыта). *1-се бала.* Ниндәй рәхәт тын алыуы.

*Умырзая.* Ниндәй саф һауа!

*Кояш.* Ас күҙеңде, ас, батыр бул, куркма.

*Умырзая.* Хәҙер, хәҙер... (үҙе яйлап кына күтәрелә, тирә-якка күҙ һала).

*Куян.* Эй, һинең исемең нисек? (көслө тауыш менән). Мин — куян!

*Умырзая.* Минме? Мин үҙемдең исемемде белмәйем.

*Куян* (көлөп). Мин дә һинең исемеңде белмәйем. (Аяк аҫтында ниндәйҙер нәҙек кенә тауыш ишетелә).

*Кырмыҫка.* Хәҙер мин һинең исемеңде әсәнемдән һорап киләйем әле.

*Куян.* Һин үҙең кем?

*Кырмыҫка.* Мин — кырмыҫка.

*Куян.* Ә-ә, бар һора, тиҙ йөрө.

*Кырмыҫка.* Мин хәҙер (сығып йүгерә).

*Күбәләк.* Шуны ла белмәйһегеҙме? Сәскә бит ул!

*Куян.* Сәскә икәнен үҙем дә беләм.

(Кырмыҫка тауышы. Әсәйем мине көтәлер инде. һау бул, сәскә! (һикерә-һикерә кыуактар араһына инеп китә).

(Күбәләк оса.  Акланға бәләкәй генә кыҙ  йүгереп инә,  ул сәскәне күреп, куддарын сәбәкәйләп, кыскыра).

*Кыҙ.* Эй, бында килегеҙ! Ниндәй матур күк умырзая! Умырзая үҫеп сыккан! Ишетәһегеҙме! Тик өҙмәгеҙ! ("Умырзая" йыры әкрен генә ишетелә).

*Балалар.* Рәхмәт, кәҙерле дуҫтарыбыҙ, беҙ һеҙҙе һакларбыҙ, рәнйетергә бирмәбеҙ, матурлағыҙ донъяны, рәхмәт һиңә, Кояшкай!

VI. Әҫәрҙең йөкмәткеһе өҫтөндә эш.

1) — Э хәҙер матур итеп укырға өйрәнәбеҙ (өлөшләп укыу).

1-се бүлек — Умырзая үҫеп сыкты.
2-се бүлек — Кояш йылыта.
3-сө бүлек — Куян балаһы.
4-се бүлек — Кырмыҫка.
5-се бүлек — Күбәләктәр.
6-сы бүлек — Кыҙ бала.

— Хикәйәне укып та алдык. һеҙгә ул окшанымы?

— Бик окшаны.

— Яҙыусы апай тураһында ни әйтерһегеҙ?

— Ул тәбиғәтте ярата, күҙәтә, күпте белә.

— Тағы ла нимә әйтерһегеҙ?

— Ул матур итеп беҙгә яҙып биргән.

— Эйе, балалар, А. Йәғәфәрова тәбиғәтте бик ярата, ундағы үҙгәрештәрҙе үҙ йөрәге аша үткәрә, матур һүҙҙәр менән яҙып бирә, тимәк, ул бай фекерле, һутлы телмәрле, тыуған тәбиғәт яҙмышында үҙен дә яуаплы тоя, балаларҙы күп белергә, укырға, туған телен яратырға өйрәтә.

2) Хикәйәне роллэп укыу.

3) Яҙ, умырзая тураһында һөйләмдәр төҙөү, улырҙы маскалар менән әйтеү, һөйләмдәрҙе дәфтәрҙәргә яҙыу.

4) һүрәт буйынса эш.

— Балалар, ошо хикәйәнең йөкмәткеһе рәссәм тарафынан һүрәттә сағылдырылған (һүрәт әләм).

Иғтибар менән карағыҙ әле, һүрәт һеҙҙә ниндәй тойғо уята?

— һүрәт беҙҙе шатландыра.

— Ни әсән, ниндәй төҫтәр өҫтөнлөк итә?

— Йәшел, бөтә тереклекте уятыусы кояш нурҙары һәр нәмәлә балкый, йәшел — йәшлек, үҫеш ул.

(Балалар һүрәттән һәр бер геройҙы күрһәтеп, уның тураһында һөйләйҙәр).

VII. Йомғаклау әңгәмәһе.

— Балалар, бында кыҙ һүрәте төшөрөлгән, һеҙ нисек уйлайһығыҙ, ни әсән?

— Кыҙ тәбиғәткә шатлана, уйнай, сәскәләргә һоклана.

— Кешә лә бит тәбиғәттең бер өлөшө, кояш балаһы. Тәбиғәт кеше ярҙамына мохтаж.

Уларға ярҙам кәрәк. Хәҙер тәүге сәскәләр үҙҙәре менән таныштырып үтер (Телевизорҙан һәр сәскә (сәскә маскаһы кейгән кыҙҙар) үҙе тураһында һөйләй).

*Бәпембә* Төш етеүгә
күҙемде асам, Көн яктыһын аҙ
күрәм. Ямғыр яуһа, тән булһа,
Керпек асмай, мин түҙәм.

*Миләүшә* Күгәрсен күҙе
кеүек Төрлө төҫтәргә керәм.
Төҫөм менән мактанмайым,
Тәмле еҫтәрҙе бирәм.

*Укытыусы.* Был сәскәнән хушбуй яһайҙар, йүткернгәндә уның төнәтмәһен әсәләр.

*Туҙғанак* Туҙғанак тип
әйһәләр ҙә, Туҙғанак юк һис
тә. Алтын һары сәскә атып,
Ултырам балкып ерҙә.

*Укытыусы.* Был сәскә тамырының төнәтмәһе эс ауыртыуҙы дауалай, сәскәләренән тәмле варенье кайнаталар.

*һөтлөкәй* Төҫөм артык
базык түгел, Үҫәм ергә
һибелеп. Тәмле минең һөт-
һуттарым, Корттар килә тиҙ
күреп.

*Укытыусы.* Ьыл сәскә лә бик файҙалы, уны ла дауа әсән кулланалар.

*Ынйы сәскәһе* Кыйғак
үлән араһынан Карайым
һирпелеп кенә Бөтә ергә
ынйы һибәм Тәмле еҫтәрем
менән.

*Укытыусы.* Был сәскә бик матур, шулай ук дарыу әсән дә кулланыла. Ләкин уның менән бик һак булырға кәрәк.

— Беҙҙең яктарҙа һары умырзая сәскәһе үҫә. Ул хәҙер һирәк калған. Ул йөрәк ауырыуынан шифа бирә. "Адонис" тип атала. Улар хәҙерге көндә беҙҙең урман-кырҙарҙа бик аҙ калған, һакка алынған. Ә күбәйтеү, үрсетеү — һеҙҙең бурыс. Такталағы плакатка иғтибар итегеҙ.

"Гүзәллекте якла һәм һакла"

(хор менән укыйбаҙ). Ул һәр сак класта элеүле торасак. Был кағиҙәләрҙе беҙ һис шикһеҙ үтәрбеҙ.

VIII. Плакаттағы кәғиҙәләрҙе укыу.

1. Ағас һәм кыуактарҙы һындырма.
2. Кайын ағасын яралама.
3. Сәскәләрҙе өҙмә, үләндәрҙе тапама.
4. Бөжәктәрҙе тотма, үлтермә.
5. Кырмыҫка иләүен туҙҙырма, һакла.
6. 1Сош ояларын туҙҙырма, якын килмә.
7. Урманда шаулама, һыҙғырма.
8. Йәнлектәрҙе куркытма.
9. Урманда сүп-сар калдырма, ут якма.

Улар барыһы ла һинең ярҙамыңа мохтаж.

IX. Дәресте "Һаумы, тиҙәр гөлдәр..." (М. Кәрим һүҙҙәре, Н. Мөстәкимов музыкаһы) йыры менән тамамлайык.

һаумы, тиҙәр гөлдәр...

1) Ауылымдың туғайҙары аша
Алыҫтарҙан кайтып киләмен,
Шишмәләргә ятып һыуҙар әсәм
һәм эйелеп өҙәм еләген.

ТС: Гөлдәр миңә: "Һаумы, һаумы!" — тиҙәр,
Алдарыма хуш еҫ сәскәләр. Бик һағындым
һеҙҙе, бик һағындым, Үҙ еремдә үҫкән

сәскәләр.

2) Айырылыуҙың оҙак йылдарында
Ниндәй яландарҙа йөрөмәнем,
Ләкин, гөлдәр, һеҙҙең шикеллеләй
Хуш еҫ бөркәгәнде күрмәнем.

— Ерҙе үҫемлектәр, тереклек биҙәй, ә уларҙы кеше хеҙмәте тәрбиәләй, һаклай.

Рәхмәт, балалар! һеҙ тәбиғәттең ысын дуҫтары, һаксылары булып үҫерһегеҙ тип ышанам.

X. Баһалау.

XI. Өйгә эш. Хикәйәнең йөкмәткеһен һөйләргә әҙерләнергә.